*Зөһрә* АЛТЫНБАЕВА

# КҮҘ ҠАРАҺЫЛАЙ ҺАҠЛАЙЫҠ

Кеше барса нәмәгә ғәзиз күҙҙәре менән баға. Шуға ла иң ҡәҙерле нимәне «Күҙ ҡараһылай һаҡла», тиҙәр.

Әммә беҙ теләгәнсә генә тәгәрәмәй донъя тәгәрмәсе. Кисә генә бөтә гүзәллеккә ҡыуанып йәшәгән кеше ҡапыл күреү һәләтен юғалта йәки насар күрә башлай. Шул ваҡытта мөғжизәләр эшләй алған күҙ табиптарына мөрәжәғәт итә ул. Марат Талғат улы Аҙнабаев тап ошондай тылсым эйәһе, табип, офтальмолог. Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы академигы, медицина фәндәре докторы, профессор.

Медицина институтын тамамлағас (1962), Башҡорт дәүләт медицина институтының күҙ ауырыуҙары кафедраһында ассистент була. 1971 йылда ошо кафедрала балалар офтальмологияһы курсын етәкләй, доцент вазифаһын үтәй. 1980 йылда Марат Талғат улы Аҙнабаевты Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бер үк ваҡытта, 1987 йылдан бирле, Башҡорт дәүләт медицина университетының күҙ ауырыуҙары кафедраһы мөдире лә.

1969 йылда М.Т.Аҙнабаев «Блефароптоз клиникаһы һәм хирургияһына материалдар» тигән темаға кандидатлыҡ, 1987 йылда С.Федоров етәкләгән Күҙ институтында беренсе булып «Балаларҙа ҡылауға (катаракта) операция яһауҙың яңы ысулдары һәм уның эффектлылығы» тигән темаға докторлыҡ диссертацияһы яҡлай.

1981 йылда Марат Талғат улының инициативаһы менән Өфөлә Күҙ микрохирургияһының өлкә-ара үҙәге ойошторола һәм Урал һәм Көнбайыш Себер төбәктәрен хеҙмәтләндерә башлай.

## АҘНАБАЕВ — ЕТӘКСЕ

Марат Талғат улы Аҙнабаев офтальмология өлкәһендәге һәр яңылыҡты күтәреп ала. Ул директор булған осорҙа Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты заманса лазер, ультратауышлы аппаратура һәм башҡа ҡоралдар менән йыһазландырылды. Был иһә юғары кимәлдә тикшеренеү алып барырға һәм дауаларға мөмкинлек бирә. 1986 йылда М.Т.Аҙнабаевтың инициативаһы менән заманса 3 бина төҙөлә. Уларҙың сафҡа инеүе Башҡортостан һәм күрше төбәктәрҙең халҡына офтальмологик ярҙам күрһәтеүҙең сифатын байтаҡҡа яҡшыртты, медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн уңайлы эш шарттары булдырҙы.

Һуңғы ике йыл эсендә генә М.Т.Аҙнабаевтың тырышлығы һәм туранантура ҡатнашлығында Яңауылда, Сибайҙа, Учалыла, Малаяҙҙа микрохирургик офтальмология үҙәктәре асылды. Был иһә ауыл ерҙәрендә үҙәктәге клиникалар кимәлендә юғары квалификациялы офтальмохирургик ярҙам күрһәтеү мөмкинлеген асты. Марат Талғат улының ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә үҙәктәр Япониянан, Германиянан ҡайтарылған заманса ҡоролмалар, аппаратура һәм микрохирургик инструменттар менән йыһазландырылған. Унда эшләгән табиптар Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты базаһында етди әҙерлек үтте. Бынан тыш улар даими рәүештә институтта методик һәм ғәмәли ярҙам алып торалар.

## АҘНАБАЕВ — ҒАЛИМ ҺӘМ ТАБИП

Оҫта офтальмохирург булараҡ, ул меңләгән ауырыуҙарға күреү һәләтен кире ҡайтарҙы. М.Т.Аҙнабаевтың исеме Рәсәйҙәге, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙәге ғилми даирәләрҙә киң билдәле. Ул күп тапҡырҙар бөтә донъя һәм халыҡ-ара конгрестарҙа докладтар менән сығыш яһаны.

Профессор М.Т.Аҙнабаевтың ғилми эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше — балаларҙа тыумыштан булған күҙ ауырыуҙарын комплекслы дауалау системаһын булдырыу.

Ул илебеҙҙә беренсе булып яңы тыуған балаларҙың күҙҙәрендәге ҡылауға-катарактаға операция яһау ысыулын уйлап тапты һәм уның һөҙөмтәләрен өйрәнде, ошондай микрохирургик операцияларҙың хәүефһеҙ һәм уңышлы булыуын, үҙ ваҡытында йомшаҡ контакт линзалар менән оптик коррекция эшләгән осраҡта баланың ҡәҙимге психофизик үҫешенә ыңғай тәьҫир итеүен иҫбатланы.

Артабан М.Т.Аҙнабаев балаларҙың күҙҙәрен тыумыштан ҡылау ҡаплаған осраҡта ике күҙгә бер юлы микрохирургик операция яһау мөмкинлеген тормошҡа ашырҙы. Был иһә клиник йәһәттән генә түгел (наркоз бер тапҡыр ғына була), психологик һәм эмоциональ (бер операция), шулай уҡ матди яҡтан да (ауырыу ике тапҡыр операция кисереү урынына бер генә тапҡыр дауалана) байтаҡҡа отошло.

Марат Талғат улы тарафынан балаларҙың күҙендә ҡылауға һәм блефароптозға микрохирургик операция яһау өсөн микроинструменттар, приборҙар уйлап табып, ҡулланыуға тәҡдим ителде һәм хәҙер улар сериялап етештерелә. Артабан ул күҙҙәге яраларҙы бөтәштереү, уларҙың тиҙ уңалыуы өсөн байтаҡ препараттар тәҡдим итте.

М.Т.Аҙнабаев медицина һәм фән өлкәһендәге һәр яңы нәмәне практикала ҡулланыуға өлгәшергә ынтыла. Мәҫәлән, 90-сы йылдарҙа институт базаһында контактлы линзалар һәм 1998 йылда яһалма күҙ яҫмалары етештереү буйынса «Кобурн оптикал Интернейшнл» (АҠШ) һәм «ЙОЛ Интернейшнл» (АҠШ) технологик линиялары асылды.

Марат Талғат улы 270-тән ашыу ғилми хеҙмәт, 6 монография авторы, 47 авторлыҡ танытмаһына эйә, 10 ғилми



хеҙмәттәр йыйынтығының яуаплы мөхәррире.

М.Т.Аҙнабаев ғилми, педагогик һәм дауалау эшен ижтимағы эшмәкәрлек менән тығыҙ бәйләнештә атҡара: ул Башҡортостан Республикаһының XII саҡырылыш Юғары Советы депутаты булды; офтальмологтарҙың Бөтә Рәсәй йәмғиәте идараһы ағзаһы; Башҡортостан Республикаһы офтальмологтары ассоциацияһы рәйесе, ҡылау хирургияһы һәм рефрекцион хирургия буйынса халыҡара совет ағзаһы.

Профессор Марат Талғат улы Аҙнабаев квалификациялы йәш кадрҙар — офтальмологтар үҫтереүгә ҙур әһәмиәт бирә. Уның етәкселегендә 5 докторлыҡ һәм 18 кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланған, тағы 3 докторлыҡ һәм 7 кандидатлыҡ диссертацияһы әҙер.

Ул балалар офтальмологтарының фәнни мәктәбен булдырҙы. Профессор М.Т.Аҙнабаевтың уҡыусылары, балалар офтальмологияһы өлкәһендә үҙ йүнәлештәрен табып, яңы асыштар яһай. Медицина фәндәре докторы М.М.Бикбов — рефракцион хирургия, медицина фәндәре кандидаттары Р.А.Аҙнабаев — кератопластика һәм реконструктив хирургия; И.С.Зәйҙуллин — тыумыштан булған һәм аҙаҡ барлыҡҡа килгән миопия, Р.Х.Искәндәров — күҙ төбө патологияһы; А.Г.Ҡаҙаҡбаев — витреаль хирургия өлкәһендә байтаҡ уңыштар яуланы.

Профессор М.Т.Аҙнабаев етәкселек иткән фәнни хеҙмәткәрҙәр коллективы «Күҙ яҫмағының тыумыштан булған ауырыуҙарын хирургик ысул менән дауалау» тигән хеҙмәттәре өсөн Ижади йәштәрҙең республика премияһына лайыҡ, уның ғилми хеҙмәттәре Рәсәйҙә генә түгел, Германия, Канада, АҠШ, Көньяҡ Корея һәм башҡа илдәрҙә лә донъя күрҙе.

Ҙур ғилми-практик эшмәкәрлеге өсөн уға «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре», РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы» тигән почетлы исемдәр бирелде.

## АҘНАБАЕВ — ШӘХЕС

Марат Талғат улы Аҙнабаев — күренекле ғалим, табип, етәксе генә түгел, әүҙем сәйәсмән, үҙ республикаһы, халҡы өсөн күп тырышлыҡ һалыусы арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе.

Шуға күрә уның заманыбыҙ, милләтебеҙ, халҡыбыҙҙың киләсәге хаҡында уйҙарын, фекерҙәрен дә белгебеҙ килде.

— Беҙҙең институт, — тип башланы һүҙен Марат Талғат улы беҙҙең менән осрашҡанда, — Башҡортостандан ситтәге милләттәштәребеҙгә ҡулынан килгәнсе ярҙам итергә тырыша. Институт табиптарынан торған бригадалар Силәбе, Пермь, Курган өлкәләренә даими барып, уларҙы дауалауҙа ярҙам күрһәтте. Беҙҙең яҡташтар Сургут, Нижневартовск, Когалым төбәктәрендә лә байтаҡ. Уларҙы ла онотмайбыҙ. Диагностика үткәргәндән һуң күптәре беҙҙең институтҡа килеп дауалана.

Киләсәк бөгөн башланғанын да иҫтән сығармайбыҙ. Башҡорт дәүләт медицина университетына башҡа өлкәләрҙән килеп уҡырға теләүселәр бик күп. Әммә абитуриентарҙың байтағы талип булып китә алмай. Бында төрлө факторҙар йоғонто яһауы мөмкин. Шулай ҙа беҙ Курган, Силәбе өлкәләренән килгән йәштәргә ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш. Сөнки улар киләсәктә үҙ төбәктәренә табиб булып ҡайтасаҡ, шул район кешеләренең һаулығы өсөн көрәшәсәк. Шуны иҫтә тотоп, беҙ Курган өлкәһенән бер егетте түләүле бүлеккә уҡырға индерҙек. Институт уның өсөн йыл һайын 11 мең һум аҡса түләй. Шул уҡ өлкәнән бер ҡыҙҙы институтҡа эшкә алдыҡ, ул ныҡлап өйрәнер, киләсәктә белемен камиллаштырыу өсөн тырышыр, тип өмөтләнәбеҙ.



М.Т.Аҙнабаев йәш ғалимәләрҙе ҡотлай

Нисек кенә әйтһәң дә, ауыл балаһына хәҙер институтҡа уҡырға инеүе ауыр. Әлбиттә, белем кимәле лә ҡала мәктәбен тамамлаусыларҙыҡы менән бер тиң түгел. Түләп уҡырға аҡсаһы ла юҡ. Әле медицина университетында күберәк ҡала балалары белем ала. Дөрөҫ, ҡалала ла белемле, йәш табиптар кәрәк. Шулай ҙа айырым төбәктәрҙә медицина кадрҙары юҡлығын һәр саҡ күҙ уңында тоторға тейешбеҙ.

Бында тағы бер нәмәне хәтерҙә тоторға кәрәк. Медицина университетын тамамлаған һәр кеше лә яҡшы табип булып китә алмай. Бының өсөн күңел байлығы, үҙ һөнәреңде ихлас яратыу мөһим. Айырыуса әлеге ҡатмарлы заманда. Сөнки йәмғиәт үҙе төрлө ҡатламдарға бүленә. Шуға күрә киләсәктә аҡсаһы, мөмкинселеге булмаған кешегә белем алыуы тағы ла ҡыйынлашасаҡ. Уҡыған өсөн түләү ҙә бөтмәйәсәк. Был йәһәттән беҙҙең халыҡҡа төрлө мөмкинлектәрҙе эҙләргә, табырға кәрәк. Хәҙер кемдәндер көтөп ятыу заманы үтте. Форсатын табып, булғандан файҙалана белеү дәүере килде. Беҙгә тап ошо нәмә етешмәй. Беҙҙең менталитет үҙгәрергә тейеш.

Уҙған йыл беҙ, күҙ ауырыуҙары институтынан 3 төркөм табип менән, Курган өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарында булдыҡ. Унда барырға беҙгә бер кем дә бойорманы. Яҙмыш елдәре арҡаһында теге йәки был төбәктә бүленеп ҡалған милләттәштәребеҙгә ярҙам итеү теләге юлға саҡырҙы беҙҙе.

Унда табиптар 1260 кешенең күҙен тикшереп, тейешле диагноз ҡуйҙы, төрлө дауалау ярҙамы күрһәтте, 70-тән ашыу кешене Өфөгә килеп дауаланырға саҡырҙыҡ. Бындай бәйләнештәрҙе бар өлкәлә лә нығытырға кәрәк. Мәҫәлән, Әлмән районында мин мәҙәниәт, мәғариф мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһындым: туған телдә уҡытыу мөмкинлеге юҡ. Меңгә яҡын халыҡ йәшәгән Тәңрекүл ауылында дауахана ябылырға тора. Элек ул ҙур дауахана булған. Дауахана, мәктәп ябылһа, ауыл да бөтә, тигән һүҙ. Беҙҙең Башҡортостандан патриот егеттәр һәм ҡыҙҙар шул төбәктәргә барып эшләһә, халыҡҡа ярҙам күрһәтһә ине. Беҙ иһә, үҙ сиратында, уларға булышырға әҙер. Бына ошо хәлдәр хаҡында мин һаулыҡ һаҡлау министры Сания Шәһәроваға һөйләнем. Ул шунда уҡ саралар күреүгә тотондо: әле Өфө ҡалаһының 3-сө клиник дауаханаһы Әлмән дауаханаһына шефлыҡ итә. Октябрь айында Әлмән районына барып, тағы 26 кешенең күҙенә операция яһаныҡ.

**— Башҡорт зыялылары хаҡында фекерегеҙ...**

— Үҙен-үҙе ихтирам иткән һәр халыҡтың зыялылары булған һәм бар. Әммә ул халыҡтың иң фәҡир ҡатламы һанала. Күпселеге рухи төшөнкөлөк кисерә. Әлеге заманда рухи байлыҡ ҡына аҙ. «Байлыҡ — бер айлыҡ» тиһә лә халыҡ, ҡулыңда аҡсаң булыуға етмәй. Кеше йөрөргә, белергә ынтылырға тейеш. Миңә байтаҡ сит илдәрҙә булырға тура килде, күп күрҙем, күп фәһем алдым. Беҙҙең халыҡ та шулай йәшәй ала бит, тигән һығымта яһаным. Бының өсөн белем һәм иҫ киткес ҙур тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ кәрәк. Башҡа ил халыҡтары менән аралашыу күп нәмәгә өйрәтә, шуға күрә мин ошо форсаттан файҙаланырға кәңәш бирер инем. Кемдер, ҡайҙалыр нимәлер күргән икән, башҡаларға ла өйрәтһен.

Мине тағы бер нәмә борсой: беҙ үҙ халҡыбыҙ вәкилдәренең уңышына ҡыуана, уны күтәрә белмәйбеҙ. Ҙур уңыштарға өлгәшкән кеше бар икән, ул беҙҙең дә ҡаҙанышыбыҙ бит. Был уңыштан таптар эҙләмәйек, кереһенсә, күтәреп алырға, башҡаларҙы ла шуға эйәрергә өндәргә кәрәк. Фәндә лә, мәҙәниәттә лә, әҙәбиәттә лә сағыштырырлыҡ, фәһем алырлыҡ матур өлгөләр булырға тейеш.

Һеҙ минең әҙәбиәткә, мәҙәниәткә мөнәсәбәтемде һорағайнығыҙ. Бына ошонда әҙәбиәткә ҡағылышлы фекерем бар. Беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә был турала аҙ яҙыла, заман геройҙары күренмәй. Яҙыусыларыбыҙҙың күбеһе Бөйөк Ватан һуғышы тематикаһы менән йәшәй. Йәштәр ҙә был мәсьәләгә иғтибар биреп еткермәй, шуға ла кешене рухландырып йәшәтерлек, дәртләнеп эшләтерлек, өлгө булырлыҡ әҙәби герой юҡ. Әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә матурлыҡҡа өндәүсе миҫалдар аҙ. Бына ауылдарҙа йорт-ҡура тирәһен беҙ һаман элеккесә ситән, таҡта ҡойма менән уратабыҙ. Атабабаларыбыҙ кимәленән ары китә алмайбыҙ — үҫеш юҡ. Беҙҙә әле һаман күскенсе халыҡ психологияһы өҫтөнлөк итә — бөтәһе лә ваҡытлыса. Ошо ерҙең хужаһы икәнһең, йортоң да, кәртә-ҡураң да быуаттар буйы тororлоҡ итеп төҙөлөүе зарур. Балтика буйы республикаларында, Кавказ төбәгендәге йорттарға

ҡараһаң, улар әллә нисә быуынға етерлек итеп ҡоролған. Аҡса юҡ, тип ултырһаң, бер нәмә лә булмай. Башҡа халыҡтар, мәсәлән, чечендар, тажиктар, беҙҙең республикаға килеп, беҙҙең ерҙәрҙә коттеджлар төҙөй, магазиндар аса, иң яҡшы машиналарҙа йөрөй, ә беҙҙең халыҡ, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, бер-береһенә кенә ҡыуыуҙан ары китә алмай.

Бында тағы бер нәмә хаҡында әйтеп үткем килә: беҙҙең тарихтың ауыһыҙ тулҡындары халҡыбыҙҙы йылға аръяғына, тау-таш араһына урынлашып йәшәргә мәжбүр иткән. Бына мин ҡулымдан килһә, ошо тау-таш араһында ятҡан, ҡыҫыҡ ерҙә йәшәгән халыҡты иркенерәк, Өфөгә яҡыныраҡ ерҙәргә күсереп ултыртыр инем. Әйтәйек, Ҡырмыҫҡалы районында ниндәй матур урындар бар. Ул саҡта Ҡустығол, Баҡсалы, Малай кеүек ауылдар үҫеп, ҙурайып китер, Ҡолҡан, Баҡый, Мәндем кеүек ауылдарҙа йәшәгән йәштәр иркен донъя төҙөй алырҙар ине. Йорт-ҡураны үҙең өсөн генә түгел, балаларыңдың балаларына етерлек итеп төҙөргә кәрәк.

**— Беҙҙең ил, республика донъяла иң бай һанала...**

— Ысынлап та, бай беҙҙең республика. Сеймал һатып ҡына байып булмай, уны эшкәртеүгә тотонғанда ғына уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Әле бына үҙҙәрендә һөт эшкәртеү, колбаса етештереү, көнбағыш майы һығыу цехтары булдырған райондарҙа үҫеш бар.

Күп төбәктәрҙә сит илдәрҙән ҡайтарылған ҡиммәтле ағас эшкәртеү станоктары тик ултыра, шуларҙы тулы көскә файҙаланыу әллә күпме килем бирәсәк. Улайһа бөтә ағас-ташты Мәскәүгә лә Ҡазанға оҙатып ултырыу етер. Ошо ағастарҙан бына тигән мебель эшләп һатырға форсат бар. «Алма беш, ауыҙға төш» тип көтөп ултырһаҡ, ҡола ялан уртаһында тирмәләрҙә тороп ҡалыуыбыҙ ҙа бар. Инвестицияларҙы ла урынлы файҙалана белергә кәрәк бит.

Беҙгә ялҡаулыҡ ҡамасаулай. Элекке кеүек, колхозда көн уҙһын, сабата туҙһын, тип йөрөгән замандар үтте. Ана, фермерҙар үҙ хужалыҡтарында нисек тырышып эшләй, сөнки улар хеҙмәт һөҙөмтәһе менән ҡыҙыҡһына, түккән тирҙәренең емешен файҙаланырға ынтыла.

**— Мәғариф мәсьәләләренә ҡарашығыҙ...**

— Беҙҙең мәктәптәр заман талаптарына бөтөнләй яуап бирмәй. Унда эш бер ҡалыпҡа ҡоролған. Уҡытыу тормош менән бәйле түгел, балалар китапса белем ала, йәғни тормоштағы бик күп кире яҡтар күҙ уңынан ситтә ҡала. Уҡыусы мәктәпте тамамлағас, ошондай күренештәргә осрап аптырай. Бер ҡатлы, тиҙ ышанып барыусан, тормошто тик ал да гөл итеп кенә күрергә өйрәнгән йәш кешегә әлеге тормошта бик ҡыйынға тура килә. Йәшәйешкә дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү үтә мөһим. Шул саҡта йәш кеше ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар алдында ҡаушап ҡалмаясаҡ, уларҙы еңергә тырышасаҡ.

Әле йәш быуынға иҡтисади, юридик белем етешмәй, ә йәмғиәттең йылдам үҫеше өсөн был үтә мөһим.

Йәштәр темаһына ҡағылғас, улар хаҡында хәстәрлек күреү, эш, торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләләренә лә туҡталып үтергә кәрәктер. Был йәһәттән дә ныҡлап уйланырға урын бар.

**— Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ, телебеҙ, милләтебеҙ үҫешенә мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

— Тел тураһында беҙ күп һөйләйбеҙ. Эйе был мәсьәлә киҫкен тора. Минең фекерем ҡәтғи: кеҫәндә һин башҡорт тип яҙылған паспорт йөрөтәһең икән, башҡортса уҡырға тейешһең. Башҡорт ауылында уҡытыу башҡорт телендә алып барылырға тейеш. Минеңсә, был мәсьәлә йылдамыраҡ һәм эҙмә-эҙлекле алып барылырға тейеш. Сөнки, көтә бирһәк, республикабыҙҙың көнбайыш райондары мәктәптәре тағы тулыһынса башҡа телдәрҙә уҡыуға күсәсәк.

Был йәһәттән беҙҙең ҡайһы бер тел ғалимдарына һығылмалылыҡ етмәй. Ҡапыл ғына әҙәби телдә уҡытыу мөмкин түгел икән, ваҡытлыса диалект телендә уҡытыуҙы башлап ебәреү зарур. Башҡорт теле бай ул, ундағы күплек ялғауҙарының -лар, -ләр, -нар, -нәр һ.б. формалары ла телде боҙмай, киреһенсә, биҙәй генә. Ә бына башҡорт теленең нигеҙен тәшкил иткән ***ҙ, ҫ, һ, ғ*** өндәрен юғалтмау — беҙҙең бурыс, сөнки был өндәр бөтһә, башҡорт теле лә бөтәсәк. Минең уйымса, ошо өндәр башҡорт теленең иң тоғро һаҡсылары. Элекке етәкселәрҙең башҡорт телен үҫтереү һәм уҡытыу өлкәһендәге әүҙем эшенә һоҡланып ҡуям. Ҡайһы бер йүнһеҙҙәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалмағанда, беҙ әле ошо телде юғалтыу хәленә килеп етмәҫ инек.

Башҡорт телен декрет ярҙамында ғына дәүләт теле итеүе ауыр. Бының өсөн бөтә милләтебеҙгә ошо йүнәлештә фиҙакәр эшләргә кәрәк. Айырыуса ауыл, район хакимиәте етәкселәре, мәктәп директорҙары әүҙем булырға тейеш, тип иҫәпләйем.

Башҡорт халҡының һан яғынан ҡырҡа кәмей барыуы мине бик борсой. Башҡортостан тип аталған республикала башҡорт халҡының һаны 21,9%, ә уның башҡалаһы Өфөлә иһә 9-10 проценттан да артмай. Уйланырлыҡ түгелме ни?!

Бына беҙ балаларыбыҙ, йәш быуын башҡорт телен белмәй үҫә, тибеҙ. Әммә бында улар ҙа, ата-әсәләр ҙә ғәйепле түгел, минеңсә. Әгәр башҡорт теле ғәмәлгә керетелмәгән, уның ҡиммәте түбән, дәүләт теле булараҡ көслө түгел икән, уның абруйы күтәрелмәйәсәк.

Йәки бына Курган өлкәһендәге 20 меңдән ашыу башҡортҡа беҙ ярҙам итмәһәк, уҡырға, тормошта үҙ урынын табырға булышмаһаҡ, Башҡортостандан конкрет ярҙам булмаһа, ундағы халыҡ һаман шул түбән дәрәжәлә ҡаласаҡ. Свердловск, Пермь башҡорттары өсөн дә беҙҙең ярҙам мөһим. Ҡоролтай Башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ, мин был йәһәттән ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тырышам, әлбиттә. Беҙҙең институтҡа килгән ауырыуҙарға күп операциялар хәҙергә түләүһеҙ эшләнә. Әлеге ҡиммәтселек заманында һәр теләгән кеше лә башҡалаға килеп күҙен дауалай алмай. Шуны иҫәпкә алып, беҙҙең институт Яңауыл, Сибай, Учалы, Малаяҙ, Туймазыла урындағы хакимиәт етәкселәре менән берлектә төбәк-ара үҙәктәр асты. Ошо тирәләге райондар халҡы Өфөгә килмәйенсә дауаланыу мөмкинлеге алды. Беҙ улар өсөн белгестәр ебәрҙек, ҡиммәтле ҡорамалдар, йыһаздар һатып алдыҡ. Оҙаҡламай Күмертау ҡалаһында ла ошондай үҙәк асырға ниәтләнәбеҙ. Был үҙәктәрҙә күрше өлкәләрҙән дә килеп дауалана алалар. Мәҫәлән, Яңауылдағы үҙәктә — Пермь, Учалыла Силәбе өлкәһенән килгән кешеләргә ярҙам күрһәтелә.

Ғөмүмән, беҙҙең институтҡа донъяның төрлө илдәренән дауаланырға киләләр. Иордания, Сүриә, Төркиәнән күҙ белгестәре беҙҙә белемен камиллаштыра, операциялар яһарға өйрәнә.

**— Әле беҙҙең илдә ошондай нисә ғилми-тикшеренеү институты бар?**

— Рәсәйҙә шундай 4 институт бар: өсәүһе мәркәздә — Мәскәүҙә, беҙҙең Өфө күҙ ауырыуҙары институты ғына перифериярла. Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк, беҙҙең институт күп профилле, йәғни беҙ күҙгә күп төрлө операциялар яһайбыҙ, күп төрлө күҙ ауырыуҙарын дауалайбыҙ. Бының өсөн беҙҙең белемле ғалимдарыбыҙ ҙа, тәжрибәле табиптарыбыҙ ҙа, йыһаздарыбыҙ ҙа етерлек.

